Теманың актуаллеге:

Бөгөн беҙгә киләсәген алдан күргән, планлаштыра алған, тормошҡа ашырыу юлдарын асыҡ төҫмөрләгән шәхес кәрәк, ә ғәҙәти уҡытыу технологиялары уҡыусының ижади эшмәкәрлегенең тулыһынса асылыуына ирек бирмәй.



Шуға бәйле уҡытыу процесында информацион технологиялар ҡулланыу инновация дәрестәренең бер төрө булып тора.



Мәктәптә уҡытылған башҡа фәндәр араһында башҡорт теле дәрестәрен абруйын күтәреүҙә, тәжрибә күрһәткәнсә, компьютер техникаһы ҡулланыуҙың да роле ҙур. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙа информацион технологиялар ҡулланыу уҡытыу сифатын күтәреүгә, предмет - ара бәйләнеш булдырыуҙа, уҡыусыларҙа эҙләнеү-тикшеренеү теләге уятырға мөмкинселек бирә, уҡыусыларҙа үҙ аллы эшләү теләген, һәләтен үҫтерә, үҙ-үҙенә ышаныс тәрбиәләй. Уҡыусыларҙа информацион культура тәрбиәләүгә булыша.



Компьютер технологияларын ҡулланыу шулай уҡ түбәндәге мөмкинселектәрҙе аса: дәрестә эш формаларын төрләләндерә ; тиҙ арала уҡыусыларҙың белем һәм күнекмәләрен тикшереп алыу; барлыҡ уҡыусыларҙың да эшсәнлеген контролда тотоу; иллюстратив материалды күберәк ҡулланыу; дәрес ваҡытын күберәк күнекмәләрҙе нығытыуға бүлеү.

Быңдай дәрестәр түбәндәге эш төрҙәрен үҙ эсенә ала:
1. Электрон дәреслектәр ҡулланыу.
2. Электрон һүҙлектәр, энциклопедиялар менән эш.
3. Презентация, слайд һәм видеофильмдар ҡулланыу.
4. Мультимедия проекторы аша лекция.
5. Компьютер ярҙамында
6. Дәрестә интернет селтәрен файҙаланыу иллюстратив материалдар йәки дидактик карточкалар әҙерләү.уҡыусылар һәм уҡытыусылар өсөн ҙур мөмкинселектәр аса. Күпселек уҡыусылар компьютер менән оҫта эш итәләр, уның ярҙамында интернет селтәрендә төрлө мәғлүмәт эҙләйҙәр.



Башланғыс класс уҡыусылары араһында «Башҡорт телен өйрәнеүҙә компьютер ҡулланыуҙың роле» тигән темаға анкета һорауҙарына яуап тар алынды. Таҡтала анкета һөҙөмтәләрен күрәһегеҙ.

- интерактив таҡтала эшләү оҡшай – 31%
- компьютер белеү тормошта кәрәк – 24%
- компьютер менән башҡорт теле дәресе ҡыҙыҡлы үтә – 29%
- интернеттан мәғлүмәт алыу өсөн – 7%
- электрон дәреслектәр менән эшләү оҡшай – 9%

Компьютер технологияларын ҡулланыу уҡытыусының үҙ эшенә ижади яҡын килеүен талап итә. Сөнки ул балаларға белем һәм тәрбиә биреү менән бергә уларҙы фәнни-ғәмәли йүнәлдереүсе лә, етәкселек итеүсе һәм уҡытыу процесын яңыса ойоштороусы ла булырға тейеш.

Мин тәҡдим иткән проекттың әһәмиәте шунда: заманса тенологияларҙы файҙаланыу белем биреү, уҡыу материалын өйрәнеүҙең һөҙөмтәлелеген бермә- бер яҡшырта, предметты тәрәнерәк өйрәнеү теләген уята, уҡыусының эшсәнлеген активлаштыра, уңышҡа ирешергә этәрә, ә уҡытыусыға дәрестәрҙе мауыҡтырғыс итеп үткәрергә, ижади эшләргә, һөҙөмтәләргә ирешергә мөмкинлек бирә.



Ошо компьютер технологияларын ҡулланып район семенарҙарында ла, Республика мәғәриф хеҙмәткәрҙәре алдында ла мин асыҡ дәрестәр күрһәттем. Дистанцион курстарҙа белем алдым.



Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт
Ижади уңыштар теләйем